## 8-се «б» синыф

**Тема:** Орджоникидзе районы. Алмаштар.

**Маҡсат:**

а)Уҡыусыларҙы Башҡортостандың баш ҡалаһы — Өфө менән тәрәнерәк таныштырыу;

б) «Алмаш» темаһы буйынса үҙләштерелгәнде системаға һалыу;

в) Тыуған ергә,тыуған яҡҡа, уның матурлығына һөйөү тәрбиәләү, һоҡланыу һәм ихтирам уятыу;

г) Уҡыусыларҙың диалогик телмәрен үҫтереү, фекерләү һәләтен арттырыу.

**Йыһаз:** Карта, маршрут картаһы, карточкалар, тест һорауҙары.

## Дәрес барышы:

**I. Ойоштороу моменты:**

- Һаумыһығыҙ! Хәйерле көн! Дәресте беҙҙең яратҡан шиғырыбыҙ менән башлайыҡ.

Бик күңелле ял иттек,
Дәрес башлана хәҙер.
Беҙ инде матур итеп
Яуап бирергә әҙер.

**II. Төп өлөш. Дәрестең темаһы һәм маҡсаты менән таныштырыу.**

Уҡытыусы:

- Бөгөнгө дәресебеҙҙе дәрес-сәйәхәт формаһында үткәрәбеҙ. «Сәйәхәт» һүҙе русса нисек була?

- Беҙгә сәйәхәт итергә карта һәм транспорт кәрәк буласаҡ. Картабыҙ бар, ул таҡтала эленеп тора.

- Сәйәхәткә нимә менән сығабыҙ? Хәҙер мин һеҙгә бер йомаҡ әйтәм, ә һеҙ яуабын табығыҙ.

Был күк өй ҡайҙа бара?
Эсе тулы бала-саға.
Аяғында кейем резиндан,
Үҙе бер ҙә туймай бензиндан.

(Автобус һүрәтен күрһәтәм.)

- Дөрөҫ автобус. Беҙҙең транспорт әҙер.
- Уҡыусылар, беҙ йәшәгән республика нисек атала?
- Башҡортостан.
- Башҡортостандың баш ҡалаһы нисек атала?
- Башҡортостандың баш ҡалаһы - Өфө.
- Тағын ниндәй ҡалаларҙы беләһегеҙ?

- Салауат, Стәрлетамаҡ, Мәләүез.
- Эйе, бөгөн беҙ һеҙҙең менән Өфө ҡалаһының Орджоникидзе районына сәйәхәт итербеҙ, сәйәхәтебеҙҙең төп маҡсаты — Өфө ҡалаһы менән тәрәнерәк танышыу, шулай уҡ «Алмаш» темаһын ҡабатлап үтербеҙ, төрлө күнегеүҙәр эшләрбеҙ, видеофильм ҡарап, йыр йырлап та алырбыҙ.
- Дәрестә актив булһағыҙ, туҡталыштарҙа осраған һорауҙарға дөрөҫ яуап бирһәгеҙ, сәйәхәтебеҙ уңышлы үтер.

**I Туҡталыш — «Мәктәп» тип атала.**

а) Карточкалар менән эшләү.

Һүҙбәйләнештәрҙең парын тап.

Моя книга — дәреслегем

Мой учебник — мәктәбем

Моя школа — Минең → ҡалағым

Моё ухо — китабым

Моя ложка — ҡолағым

б) Текстан алмаштарҙы табып төркөмсәләрен әйтегеҙ.
- Иҫкә төшөрөп үтәйек әле, беҙҙең ниндәй алмаштар бар?
- Зат алмаштары: мин, һин.
- Эйәлек алмаштары: минең, һинең.
- Һорау алмаштары: кем? нимә? ҡасан? ҡайһы?
- Күрһәтеү алмаштары: был, ошо, теге, шул, былар.
- Билдәһеҙлек алмаштары: әллә кем, кемдер, әллә ниндәй.
- Билдәләү алмаштары: һәр кем, һәр береһе, һәр ҡайҙа.

Текст.
- Әйтегеҙ әле, был ниндәй урам?
- Был Октябрь проспекты.
- Миңә беренсе һанлы интернат-гимназия кәрәк ине.
- Ул Рәсәй урамында. Мин дә шул яҡҡа барам. Әйҙәгеҙ күрһәтәм. Һеҙ ҡайһы районда?
- Мин Мәләүез районынан килдем.
- Ҡасан килдегеҙ?
- Бөгөн килдем.

**II Туҡталыш «Башҡортостан — минең республикам» тип атала.**
- Был туҡталышта һеҙ тест һорауҙарына яуап бирергә тейешһегеҙ.

1) Башҡортостан территорияһы (143,6)
2) Ниндәй эсемлекте бейә һөтөнән эшләйҙәр?
3) Беҙҙең республикала нисә кеше йәшәй? (400000 артыҡ)
4) Башҡортостандың территорияһында нисә милләт вәкиле йәшәй? (80 артыҡ)
5) Республикала нисә район бар?
6) Башҡортостанда нисә ҡала бар? (21)
7) Башҡортостандың президенты кем?
8) Республиканың флагы ниндәй? (Зәңгәр-аҡ-йәшел)
9) Башҡортостан Рәсәй менән нисә йыл бергә?

**III Туҡталыш. Өфө ҡалаһы. Өфө ҡалаһының тарихы.**

-Әйҙәгеҙ, беҙҙең сәйәхәтебеҙ күңелһеҙ булмаһын өсөн бер аҙ туҡтап ял итеп, йыр йырлап алайыҡ.

(Йыр «Матур Өфө ҡалаһы»).

Бына инде килеп тә еттек Өфө ҡалаһына. Ниндәй матур, төҙөк беҙҙең баш ҡалабыҙ, бейек-бейек йорттары, төҙөк урамдары, киң проспекттары, майҙандары һәм парктары, заводтары һәм төҙөлөштәре менән күркәм ҡала. Быйылғы йылды президентыбыҙ М.F.Рәхимов «Төҙөкләндереү йылы» тип иғлан итте.

(Этот год наш президент объявил голом благоустройства).

**Уҡытыусы һүҙе.**

Өфө ҡалаһына 1574 йылда нигеҙ һалынған. Элек ул бәләкәй (нығытма - крепость) булған, һәм уны «Имән-ҡала» тип атап йөрөткәндәр. 1586 йылда ғына Өфө ҡалаһы ти йөрөтөлә байлайҙар. Ул Ағиҙел буйында, бейек ярҙа урынлашҡан.

Уфа основана как крепость в 1574 году, раньше называлась Тора-тау, затем «Имән-ҡала» (Дубовый город).

Яр башында ике мөһабәт һәйкәл. (Дуҫлыҡ монументы һәм С.Юлаев һәйкәле). Поселение расположенное там, где сейчас монумент Дружбы, носило название Тора-тау.

(Китаптан күрһәтергә).

**IV туҡталыш Өфө ҡалаһы. Иҫтәлекле урындары тип атала.**

-Ә хәҙер, видеофильм ҡарайыҡ. (5 минут)

-Һораузар бирәм.

-Был видеофильмда ниндәй иҫтәлекле урын тураһында һүҙ барҙы?

Өфөлә иҫтәлекле урындар бик күп. Шуларҙың иң билдәлеләре:
Дуҫлыҡ монументы ҡасан төҙөлгән?
1957 йылда Беҙҙең Рәсәйгә ҡушылыуына 400 йыл тулыу айҡанлы төҙөлгән. (Состоялась закладка памятника, была установлена мраморная доска); был открыт в 1965 году — символизирует братскую дружбу русского и башкирского народов.

-Скульпторҙары кемдәр?

-Скульпторҙары М.Ф.Бабурин, Г.П.Левицкая, архитекторҙары — Е.И.Кутырев, Г.И.Гаврилов.

Өфө ҡалаһында тағын да бик билдәле 11111111 башҡорт халҡының милли геройына бағышланған һәйкәл бар?

-Башҡорт халҡының Милли геройы кем?

-С.Юлаев һәйкәленең скульпторы кем?

-2007 йылда Башҡортостанда ниндәй ҙур ваҡиға байрам ителәсәк?

-Беҙҙең Рус дәүләтенә ҡушылыуына 450 йыл.

**V туҡталыш аҙаҡҡыһы — Өфө районндары. Орджоникидзе районы.**

Уҡытыусы һүҙе:

-Өфө ҡалаһында 7 административ район бар. Улар: Дим, Калинин, Ленин, Киров, Октябрь, Совет һәм Орджоникидзе райондары.

-Өфө буйлап сәйәхәтебеҙҙе дауам итәбеҙ. Ниһайәт беҙ Орджоникидзе районына ла килеп еттек. Был район ҡаланың төньяҡ районында урынлашҡан. Орджоникидзе районы бик ҙур, үҙе ҙур ҡасаба (микрорайон) булып һанала. 1931 йылда тағын ҡасаба төҙөлә — Черниковка. Районға 1956 йылда нигеҙ һалына. Әлек был район урынында баҫыу булған, иген үҫтергәндәр. Хәҙер был район ҡаланың эре промышленность һәм культура үҙәгенә әйләнде.

**Текст Өҫтөндә эш.**

- Хәҙер ошо район тураһында китаптан текст уҡып китәйек. Китаптарҙы астыҡ.

а) уҡытыусы уҡый, тәржемә итеү.

б) Һүҙлек эше.

тарих-история
быуат-век
ҡасаба-микрорайон
нефть эшкәртеү-переработка нефти
мәсет-мечеть
Еңеү паркы-парк победы

тыныслыҡ-мир.

в) сылбырлап уҡыу.

г) таҡталағы һүҙҙе уҡыусы таҡтала яҙа.

### III Йомғаҡлау. Баһалау.

- Ошоноң менән беҙҙең сәйәхәтебеҙ тамам. Ул һеҙгә оҡшанымы? Беҙ ҡайҙарҙа булдыҡ?
- Эйе, текста әйтелгәнсә, Өфө ҡалаһы һәр ваҡыт матур булһын. Ерҙә тыныслыҡ булһын, киләсәктә лә халыҡтар гел шулай бергә, дуҫ йәшәһен! Башҡортостаныбыҙ көндән-көн үҫһен, матурланһын, сәскә атһын!

«Башҡортостан» һүҙенән кем күпме һүҙ таба?